**БАШҠОРТОСТАН ЯҘЫУСЫЛАРЫНЫҢ XIII СЪЕЗЫ АЛДЫНАН**

**В ПРЕДДВЕРИИ XIII СЪЕЗДА ПИСАТЕЛЕЙ БАШКОРТОСТАНА**

*Тамара ҒӘНИЕВА*

# Шиғриәт – яҡтылыҡ һәм һағыштыр...



Сибай ҡалаһына инер юлда һине ҡотһоҙ, үҫенте әҫәре күренмәгән ҡап-ҡара түбәләстәр ҡаршылай. Алтыны йыуып алынған ер аҫты тоҡомо тау-тау өйөп ҡуйылған да, асылда аҫыл төбәктәрҙең береһе булып иҫәпләнгән төйәкте ярайһы ямаҡлап тора ул. Ысынмылыр-бушмылыр, йылдар үткәс был тауҙы яңынан йыуһаң, ҡалдыҡ-боҫтоҡ затлы бөртөктәр алырға мөмкин икән, тиҙәр. Хатта, имештер, ошо «шлак» тип аталған тауҙы сит илдән кемдер, япондар тиме, һатып алырға ла риза икән. Анау тиклем балсыҡ-ташты йыу, алтын әҙләп ҡара шунан! Ана шуға ла ҡиммәт, күрәһең инде, алтындың хаҡы. Бер уйлаһаң, ни бысағыма кәрәктер ул алтын тигәндәре, әйтерһең, уныһыҙ йәшәп булмай. Әммә кешелек тарихын, милләттәр яҙмышын нәк ана шул алтын ғәләмәте өҙләкһеҙ оҙатып килә һәм ил, халыҡ мәртәбәһе менән милләт кеүәтенә хаҡ ҡуя. Мәҙәниәт тә шулай. Мәшәкәтле, ығы-зығылы был донъяның сәйер ҡануны бар: мәҙәниәте юғары милләт кенә хөрмәткә лайыҡ һәм сәнғәте юғары илдәргә генә ихтирам ҙур.

Дөйөм мәҙәниәт тип аталған рухи ҡиммәттәр хазиналығындағы иң затлы ҡиммәт, моғайын, шиғриәттер. Ысын шиғри һүҙ донъяуи ығы-зығы эсендәге алтынға бәрәбәрҙер. Бер ҡараһаң, тормошта уның бер генә кәрәге юҡ кеүек, әммә кешелек матди етешлеккә өлгәшкәндә лә, ҡыйынлыҡтар кисергәндә лә шиғри һүҙгә битараф ҡарай алмай.

Башҡорт әҙәбиәте – шағирҙарға бай әҙәбиәт. Шиғыр сығарыу – башҡорттоң милли һыҙаты. Бәйетме, таҡмаҡмы, йырмы, ҡобайырмы кеүек шиғри телмәр менән хис-тойғоһон тасуирлап ҡарамаған кеше юҡ ул башҡортта. Сөнки телмәр үҙенсәлеге үҙе үк шиғриәткә тартым уның, уй-фекер, кисереш төшөнсәләре күбеһенсә рифмаға һалынған тапҡыр әйтемдәр аша белдерелә. Телмәр иһә, йәшәүҙең үҙе кеүек үк тәбиғи күренеш булыу сәбәпле, һөйләштәге әлеге үҙенсәлек милләттең ҡәҙимге күңел һәм йәшәү торошон тәшкил итә.

Башҡорт шиғриәтенең, минеңсә, ике төп асылы бар: береһе – мәғрифәтселек, икенсеһе – моңло һағыш. Нәҡ ошо ике төп үҙенсәлек бөйөк эпостарҙан алып йырҙар, хатта мәҡәлдәр кеүек поэтик формаларҙың да төп күрһәткесе ролен үтәй ҙә инде. Һәм, әлбиттә, тау-тау әҙәби хазина эсендәге саф алтын бәрәбәренә торорлоҡ шиғриәт тә һирәк була. Шуныһы үкенесле, саф ҡаҙылма алтындың «аичит» тигән аныҡ характеристикаһы һәм ҡабул ителгән тәбиғи стандарт күрһәткесе бар, шиғриәтте иһә былай стандартлап та, бизмәнләп тә булмай, уны бары яҙылмаған ҡанундар һәм айырым кешеләрҙең күңел бизмәне, аҡыл ҡеүәһе менән генә баһаларға, ҡиммәтен зауыҡ үҙенсәлеге менән генә билдәләргә мөмкин. Әммә шуныһы ла хаҡ: күңел зирәклеген дә Аллаһы тәғәлә төрлөсә итеп бирә кешегә, берәүҙәр моң-һағышлы фәлсәфә кеүек тәрән сөңгөлдәр даирәһен көсәһә һәм шул кисерештәр аша рух тәрәнлегенә ынтылыуҙан ләззәт тапһа, икенселәрҙе әллә ни күңел һәм зиһен хеҙмәте талап итмәгән шиғри телмәр ҙә ҡәнәғәтләндерә. Был йәһәттән XX быуат иң үҙенсәлеклеһелер: XX быуатта башҡорт шиғриәте юғары пробалы шиғри зиннәттәр тыуҙырыу менән бер рәттән, алтындың янында ла ятып

ҡарамаған ялтырауыҡ алдатҡыстар әтмәләү менән дә мәшғүл булды. Бер төрлөһө милләт мәртәбәһе булып заманалар һынауын үтәсәк хазинабыҙ булһа, икенсеһе — сүп-сар өйөмө булып теңкәгә тейәсәк, әммә дөйөм төшөнсә сүрәтендәге ғәжәйеп старатель — халыҡ хәтере уларынан арыныу сараһын барыбер табасаҡ әле.

XIX быуат милләттәштәребеҙҙе мәшһүр Аҡмуллабыҙҙың «Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!» тигән саҡырыуы менән оҙатып ҡалһа, XX быуат иһә Шәйехзада Бабичтың «Халҡым өсөн» тигән принцибы менән башланып китте. Дөрөҫ, был икәүҙең яҡты идеалдары авторҙар тоҫмаллаған юҫыҡ һәм тәрәнлектә үҫеш алмаһа ла, XX быуатта башҡорт шиғриәте донъяны образлы танып-белеү йүнәлешендә ярайһы зиннәтле табыштарға юлыҡты.

Башҡорттоң быуаттар һынауын үткән төп идеологияһы — ВАТАН-ИЛ. Замана мәғәнәһеҙ идеологияларҙы көсләп таҡҡанда ла төп хазина-ҡиммәт төшөнсәһе үҙ ролен юғалтманы һәм уны башлыса шағирҙар йөмлә халыҡтың иҫенә төшөрә торҙо. Ватан, милләттең рухи мәртәбәһе кеүек төшөнсәләр һуңғы йылдарҙағы башҡорт шиғриәтендә уғата колорит, уғата нескәлек менән тасуирлана.

50-70-се йылдар халыҡ күңелен фронтовик шағирҙарҙың, бигерәк тә Мостай Кәрим, Назар Нәжми, Муса Ғәли ижады, күңел драмаһы әсир итһә, 70-80-се йылдар Рәми Ғарипов, Рауил Бикбаев, Тимер Йосопов, Рәшит Назаров, Хәсән Назаров, Әнисә Таһирова һәм уларҙың йәштәштәре кисерештәренә һоҡланды, уларға иһә Факиһа Туғыҙбаева менән Рәмзилә Хисаметдинованың эстетик зауығы килеп ҡушылды. Шағирҙар бит күп, ә бүтәндәр, тип һорарһығыҙ. Эйе, иншалла, шағирҙар күп беҙҙә, һәйбәт шағирҙар ҙа етерлек, көмөштәй сыңғырлап торған һүҙ сәнғәте бар беҙҙә. Әммә минең зауығым алдараҡ телгә алынған шағирҙар шиғриәтен алтын бәрәбәренә ҡуя. Бәлки, бәхәсһеҙ ҙә түгелдер был инаныу. Хәҡиҡәт иһә, әлбиттә, заманалар, ваҡыт хөкөмөндә, киләсәк ихтыярында. Ул киләсәккә башҡортто Әхмәр Үтәбай, Йомабикә Ильясова, Тамара Искәндәриә, Ғәбиҙулла, Салауат Әбүзәр етәкләп индерер, моғайын. Уларға... Ә бына улар үксәһенә һуң кем баҫыр?.. Ындай һорау һәр быуын алдына килеп баҫа. Мәҙәниәт, сәнғәт, әҙәбиәт өлкәһендә генә түгел, ғөмүмән йәшәйештең үҙенең дә киләсәге нисек булыр, беҙҙән һуңғыларҙың милләт яҙмышы өсөн яуаплылығы беҙҙекеке иш булырмы, тип һорауы йәки ошо хаҡта борсолоуы бик тәбиғи һәм нәҡ ошондай хәстәр милләттең рухи ҡиблаһы менән матди нигеҙҙәрен ҡурсалау, төп инанысыбыҙ ВАТАН төшөнсәһенә тоғролоҡ һаҡлау талабын ҡуя, йәшәү этәргесен эҙләргә булышлыҡ итә лә инде. Тау-тау хәстәр-мәшәҡәт өйгән ысынбарлыҡ эсендә алтын бөртөктәре ни сама икән, мәртәбәне күтәрерҙәй саф хазинаны сүп-сарҙан арсалар ҡөҙрәт бармы әле милләттә? Дөйөм мәҙәниәт падишаһы — һүҙ сәнғәте оҫталары, таланттар донъяға, диндәрҙең күбеһе шағирҙарҙы өнәп бөтмәһә лә, Аллаһы тәғәлә ҡөҙрәте менән килә, халыҡтың күңел талабы тыуҙыра уларҙы. Был элитар сәнғәтте әлмисаҡтан уҡ баһаларға өйрәнгән башҡорт өсөн шиғриәт йәшәүҙең үҙе кеүек үк ҡәҙерле. Был һыналған төп һәм берҙән-бер хәҡиҡәт. Юғиһә, Зөлфиә Ханнанова, Гөлназ Ҡотоева, Айһылыу Ғәрифуллиналар ижадын нисек аңлатаһың? Милли рух ергә һалып тапалған, теленән яҙа башлаған быуын балалары бит улар. Рухиәтһеҙлек быҒауына күнмәгәндән йырылып сығып йыр йырлап ебәргән сылтыр шишмәләй саф уларҙың ижады. Фронтовик-шағирҙарҙың ейәндәре. Минең быуындың балалары хәтлем генә йәштә әле улар. Иғтибарлы, айырыуса аяулы булыр кәрәк ине был өсәүгә, XXI быуат шиғриәте нәҡ уларҙың күңел бөтөнлөгөнә бәйле лә баһа.

Йөҙ йыллыҡ һынауын үткән Аҡмулла менән Шәйехзада Бабичтың ҡорона ҡайһы бәхетле шағирҙы саҡырыр икән киләһе быуат? Бөгөн үтә егәрлелек күрһәтеп дан яулағандарҙымы? Йә булмаһа, рәсми йәмәғәтселек күрмәмеш булғандарҙымы? Әйтеүе ҡыйын... Тик шуныһы ғына бәхәсһеҙ — башҡорттоң йорт-ере, хоҡуҡтары ғына тарая ул, зауыҡ бизмәне менән ВАТАН тип аталған төп идеяһы кеүек рухи даирәһе, рухи хәтере шул көйө тотороҡло һәм камил, шул тиклем юғарылыҡ һәм тәрәнлеккә нигеҙләнә ки, зиннәттәр баһаһында яңылышлыҡ бөтөнләй булмай тиерлек. Быларҙы милли мин-минлектән сығып әйтеүем түгел, был милләтебеҙҙең ошо сифатын күптән инде төшөнөүҙән тетрәнгән күңелемдең халыҡ аҡылына ла, шул халыҡтың шиғри һүҙ сәнғәтенә лә һоҡланыуҙан хасил асыштарым. Харап икән, яңы белдеңме шуны, тиерһегеҙ. Дөрөҫөн әйткәндә, камиллыҡ критерийҙарын әле лә белмәйем. Тик башҡорт шиғриәтендәге аҫыл ынйыларға, көмөш тәңкәләргә, алтын бөртөктәренә юлыҡҡан һайын сәнғәт ҡөҙрәтенә инаныуым арта. Шул ләззәт өсөн рәхмәт уҡыйым һеҙгә, шағирҙар!

Шиғыр уҡығыҙ, йәмәғәт, офоҡтарығыҙ иркенәйеп яҡтырыр ҙа күңелегеҙгә моңсол һағыш оялар.

Яҡтылыҡ та, һағыш та йәнде зирәклеккә әйҙәй ул...